*Дамир ВӘЛИЕВ*

# АРҒАЯШ БАШҠОРТТАРЫНЫҢ АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫ ҠОМАРТҠЫЛАРЫ

*Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы — Көньяҡ Уралдың иң гүзәл төбәктәренең береһе. Ул Силәбе ҡалаһынан төньяҡтараҡ, Силәбе — Екатеринбург тимер юлы өҫтөндә урынлашҡан. Райондың майҙаны 2791 квадрат километр. Унда 43227 кеше йәшәй, шуларҙың 26217-һе башҡорттар, урыҫтар — 14701, татарҙар — 2013 кеше.*

*Арғаяш районында 36 күл, 102 ял итеү базаһы бар. Иң гүзәл һәм иң ҙур күлдәр: Арғужа, Өйәлге, Киҙәгәс, Арғаяш, Ҡалды һ.б. Өйәлге күленең майҙаны 7 мең гектар, оҙонлоғо — 14, киңлеге — 9 саҡырым, иң тәрән урыны — 15 метр. Ул диңгеҙ кимәленән 274 метр бейеклектә ята. Ғинуар айының уртаса температураһы — $16^0$С. Һыуының сифаты һәм радондың запасы буйынса Өйәлге Рәсәйҙә икенсе урында тора. Күлдәр бөтәһе лә өлкә хакимиәте ҡарамағында.*

*Арғаяш районында ер аҫты ҡаҙылма байлыҡтары: аҡ һәм ҡара мәрмәр таш, көршәк яһай торған балсыҡ, торф, каолин, алтын ятҡылыҡтары бар.*

*Арғаяш районы иң тәүҙә, 1918 йылда, Арғаяш кантоны тип иғлан ителә. 1919 йылдан алып 1930 йылға тиклем Башҡорт АССР-ы составында Арғаяш кантоны, ә инде 1930 — 1934 йылдарҙа кантон икегә бүленгән хәлдә, Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондары статусында йәшәй башлай. 1934 йылда ВЦИК-тың (Бөтә Союз Башҡарма Комитеты) 17 ғинуарҙа сығарылған ҡарары буйынса, халыҡтан да һорамайынса был райондарҙы Силәбе өлкәһенә бирәләр. Ҡарарҙа булған бер пункт, үкенескә ҡаршы, тормошҡа ашырылмай ҡала, ул да булһа — ике райондың нигеҙендә Арғаяш башҡорт милли округын төҙөү.*

*Шәхес культы һәм унан һуң хөкөм һөргән торғонлоҡ йылдары элекке Арғаяш кантонында (Арғаяш, Ҡоншаҡ һәм Сосновка райондары) йәшәгән башҡорттарҙың рухына һәм, ғөмүмән, мәҙәниәтенә ҙур зыян килтерҙе. Райондарҙа 50-се йылдарға тиклем башҡорт теләндә сыҡҡан гәзиттәр бөгөнгө көнгә тиклем сығарылманы. Өлкә радиоһы һәм телевидениеһы башҡорттар һәм уларҙың тормошо, проблемалары тураһында тапшырыуҙарҙы бик аҙ алып бара. Бында махсус каналдарҙың булыуы ла, моғайын, зыян итмәҫ ине. Айына бер тапҡыр сығарылған өлкә гәзите бер үҙе бөтә мәсьәләләрҙе күтәрә алмай. Был баҫманың йышыраҡ сығарылыуы кәрәк.*

*Күренекле башҡорт шағиры, Салауат Юлаев премияһы лауреаты Рауил Бикбаевтың «Автобиография» тигән шиғырында ошондай юлдар бар:*

*Хәл өҫтөндә васыят әйтер саҡта,*
*Йыр сығарған халҡым.*
*Тик бер аллам ҡалды ерҙә — халҡым.*
*Тик бер аллаң булһын, дуҫым, халҡың.*

*Был тәрән мәғәнәле, фәлсәфәүи юлдарҙа ошондай һорауға яуап ярылып ята: һүнеп барған мәҙәниәтте, рухты нисек, нимәгә таянып уятырға? Яуап былай: халыҡтың хәтерендә һаҡланған рухи мираҫҡа таянырға кәрәк.*



05-2001.p65 142 30.07.01, 9:42

# Йырҙар һәм бейеү көйҙәре

### «Суҡан батыр»

«Суҡан батыр» ғәҙәти йыр түгел. Ул марш формаһында башҡарыла. Бындай көйҙәргә эпос әҫәрҙәрен башҡарғандар. «Суҡан батыр», дөрөҫөн әйткәндә, тулы күләмдә һаҡланмаған ҡобайыр. Был ҡобайырҙы һөйләүсе Сәфәрғәле Солтанбәков (1905-1985) Ҡужа (Левашовка) ауылында тыуып үҫкән. Бала сағынан һуҡыр булыуына ҡарамаҫтан, тырышлығы һәм ныҡышмалығы арҡаһында мәшһүр ҡурайсы-сәсән булып танылa. 1932 йылда, үҙе әйтеүе буйынса, Башҡортостан ҡурайсылары бәйгеһендә ҡатнашып призлы урын алған. Бик күп боронғо йырҙарҙы һәм легендаларҙы белә ине.

Ҡобайыр XVI — XVII быуаттарҙағы ваҡиғаларға бәйле. Был дәүерҙә Урал аръяғы башҡорттары (бигерәк тә хәҙерге Силәбе, Курган өлкәһендә йәшәгәндәре) йыш ҡына Себер ханлығының уларҙы буйһондороуға дәғүәләшеүенә ҡаршы көрәшкәндәр. Тап ошо заманда башҡорттарға көнсығыштан ҙур яу килгән. Башҡорттарҙы был яуға



ҡаршы Суҡан тигән батыр ойошторған һәм улар был ҡанлы һуғышта еңеп сыҡҡандар. Күп кеше һәләк булған. Боронғо йола буйынса, һәләк булғандарҙы кейемдәре һәм ҡоралдары менән бергә ҡәбергә күмгәндәр. Ошондай ҡәберҙәрҙе «шаһиттар зыяраты» тип атар булғандар. Был зыярат хәҙер ҙә бар, ул Ҡужа (Левашовка) ауылынан алыҫ түгел.

Халыҡ илбаҫарҙарҙы еңеүсе батыр Суҡанға арнап ҡобайыр сығарған.

Тиррәм, тиррәм тир икән, ти,<br>
Суҡан батыр ир икән.<br>
Маңлайына уҡ тейһә ти,<br>
Тирем сыға, тир икән.<br>
Тиррәм, тиррәм тир икән, ти,<br>
Суҡан батыр ир икән.<br>
Тубығына туп тейһә ти,<br>
Тубылғы ағас, тир икән.

Ҡобайырҙың көйөн Солтанбәков Сәфәрғәли бабай ҡурайҙа башҡарҙы һәм йырлап та күрһәтте. «Суҡан батыр» көйөн бөгөнгө көндә йыш ҡына концерттарҙа Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Мәүлетбай Ғәйнетдинов башҡара. Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары хатта «Суҡан батыр» тигән бейеү ижад иткәндәр.

### «Киҙәгәс»

Был йырҙың һүҙҙәре «Башҡорт халыҡ ижады» китабында[1], ә нотаға һалынған көйө беренсе мәртәбә «Фоль-





05-2001.p65 143 30.07.01, 9:43

клор народов РСФСР» йыйынтығында[2] донъя күрҙе.

Сәфәрғәле бабай һөйләгән легенда буйынса, «Киҙәгәс» йырын Салауат Юлаев менән бергә батшалыҡҡа ҡаршы көрәшеп, карателдәргә әсирлеккә төшкән башҡорт ирҙәре сығарған. Киҙәгәс күле урыҫ теләндә «Кисегач» тип йөрөтөлә.

Киҙәгәс тә күлдең, ай, буйында
Күп командаларға дәл булдым[3].
Үләнде күлдең буйында,
Ай-һай ҙа беҙҙең ғәзиз баштар[4],
Тотолорға шунда (ла) маң[5] булдым.

Ҡамсы һабы бик нәҙек,
Ун икеләрҙән дә үрелгән.
Дуҫ-ишкәйем минең малолетка,
Ай-һай ҙа беҙҙең ғәзиз баштар,
Күп нужаларҙы күрелгән.

Ристан килә жәйәүҙәп,
Алдан да арттан ҡарауыл.
Беҙҙең генә илде һораһағыҙ,
Ай-һай ҙа беҙҙең ғәзиз баштар,
Һирәк-һирәк ҡалған аҙ ауыл.

## *«Ҡолой кантон»*

Был йырҙың бер нисә варианты йәшәп килә. Йыр 5-се башҡорт кантоны начальнигы Мөхәммәтҡолой Кучуковҡа арналған. Мәғлүмәттәр буйынса, Мөхәммәтҡолой Кучуков ҡаршылыҡлы шәхес булған. Бер яҡтан ҡарағанда, ул власты яратыусы, ҡаты күңелле, аяуһыҙ етәксе, ябай халыҡты йәлләмәгән, ҡаршы һөйләүселәрҙе ҡамсы менән һуҡтарған. 1812 йылғы Ватан һуғышында үҙе етәкселек иткән ғәскәр менән Парижды алыуҙа ҡатнаша. 1825 йылда Мөхәммәтҡолой үлгәс, кантонлыҡты ҡабул иткән улы Сәғит өс тыу бейә һуйып, бәйге ойоштора һәм атаһы хөрмәтенә көй сығарған ҡурайсыға бүләк иғлан итә. Шул ваҡыт Хәлит ауылының ҡурайсыһы сығып, бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланған «Ҡолой кантон» көйөн уйнап ебәрә. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, был кешенең исеме Әптекәй була.

Ҡолой кантонды ла (ай) бай, тиҙәр,
Ҡамсат та бүрке, ай, бар, тиҙәр.
Үҙ хөкөмдәре лә үҙ ҡулында,
Ништәһә лә ирке бар, тиҙәр.

Ҡолой кантондың да, һай, буйҙары
Буйға ғына үҫкән тармалай.
Мейәс кенә буйын, һай, биләгән
Ҡолой кантон менән дә Ермолай.



Ҡолой кантонды ла бай, тиҙәр,
Еккән дә генә аты тай, тиҙәр.
Үҙ хөкөмдәре лә үҙ ҡулында,
Ни эштәһә лә ирке бар, тиҙәр.

Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: йырҙың һүҙҙәре менән көйө араһында айырма бар һымаҡ. Көйҙөң эпик, киң масштаблы яңғырауы власть менән мауыҡҡан, үҙенең бөтә эшмәкәрлеген батшаға хеҙмәт итеүҙә күргән шәхескә тура килмәгән һымаҡ тойола. Ләкин был беренсе ҡарашҡа ғына шулай, сөнки ҡатмарлы заман кешеләрҙе үҙенсә «бөгә». Ошо ҡаршылыҡ, моғайын, бер яҡтан, етәкселектең бер кеше ҡулында тупланыуы ни тиклем шәхескә (хакимгә) зыянлы икәнен күрһәтеүе менән билдәләнһә, икенсе яҡтан, идара итеү хоҡуғы булмаған кешене ни тиклем кәмһетә, юҡҡа сығара. Тимәк, «Ҡолой кантон» йырының һүҙҙәре генә түгел, хатта көйө лә бик көслө социаль протест булып яңғырай.

## *«Сәйкә батыр»*

Легенда буйынса, Сәйкә Аҡбаш ауылы кешеһе. Ул ирек һөйөүсән булған һәм ғәҙеллеккә ынтылған. Бай помещиктарға һәм казактарға ҡаршы көрәшкән, халыҡ мәнфәғәтен яҡлаған. Бер нисә мәртәбә төрмәлә ултырған, ҡасҡан һәм тағы тотолған. Һуңғы китеүенән ҡайтмаған.



Турсанай ҙа атҡа менеп елгән
Сәйкә батыр тигән ир микән?
Түрәләргә ҡаршы яуап биргән
Сәйкә батыр тигән ир микән?

Ҡыҙырым ғына ҡыҙырым, һай,
шарлыҡта
Сәйкә меҫкенкәйҙең төйәге.
Сәйкә меҫкен өсөн кем илаһын,
Илаһа, илар уның инәһе.

Ялан ғына ерҙә тибен тибә
Сәйкә меҫкенкәйҙең төйәһе.[6]
Төрмәләрҙә ятып серер инде
Сәйкә меҫкенкәйҙең һөйәге.

Ишекәйем алды шау ҡайынлыҡ,
Шарлап ҡына торған ел үтмәй,
Ризығың ситкә сәселдиһә,
Илен-йортон ташлап кем китмәй.

## *«Арғужа»*

Йырҙың тарихы буйынса, Шәрәфетдин Вәйсилов тигән Ялтыр ауылының бер ғәйәр егете халыҡты яҡлап йыш ҡына батша хакимиәтенә ҡаршы сыҡҡан. Ул власть башлыҡтарының малын ҡыуып алып китер, йорттарын яндырыр булған. Шул сәбәпле уны Силәбе төрмәһенә ябып ҡуялар. Ул ҡаса һәм тағы элекке эшенә тотона. Шулай йөрөй торғас, Шәрәфетдинде тоталар һәм каторгаға оҙаталар. Ул унан ҡайта алмай вафат була.

Архив мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Шәрәфетдин Ялтыр ауылы муллаһы Вәйсилҡара Ҡужәхмәтовтың (1792 йылғы) беренсе ҡатынынан тыуған улы була. Уның 1854 йылдан Силәбе төрмәһендә ултырыуы билдәле. 10-сы ревизия (халыҡтың иҫәбен алыу) материалдары буйынса, 1859 йылда Шәрәфетдингә 37 йәш була. Шулай итеп, халыҡ һөйләгән Шәрәфетдин Вәйсиловтың тарихы менән рәсми мәғлүмәттәр тап килә.

«Арғужа» йыры Шәрәфетдин Вәйсилов Арғужа күле буйында ҡасып йөрөгән ваҡытында ижад ителгән. Йыр тексының авторы ла Шәрәфетдин үҙе булырға тейеш. Әгәр был дөрөҫ икән, ул саҡта Шәрәфетдин Вәйсилов талантлы һәүәҫкәр композитор булған.



Арғужаҡай буйы, ай, һары тал,
Юнып ҡына алған(да) уҡ кеүек.
Уйлағанда уйҙар, ай, юҡ кеүек,
Эскенәйем яна ут кеүек.

Арғужа ла буйлап йөрөгәндә,
Ятып ҡалды ҡайыш дилбегәм.
Дилбегәм дә өсөн ҡайғырмайым,
Ятып ҡалды тыуған илгенәм.

Арғужа ла буйлап йөрөгәндә,
Исемемдә яҙҙым ташына.
Аға ла эне һүҙен тыңламайса,
Еттем, бугай, ғәзиз башыма.

## *«Шәрәфетдин Вәйсилов йыры»*

Был йырҙы Шәрәфетдин Вәйсилов үҙе, ҡасып йөрөгән ваҡытында, ижад иткән. Әгәр ҙә Шәрәфетдин һәүәҫкәр композитор тип фараз итеүебеҙ дөрөҫ булһа, ул ваҡытта Шәрәфетдин Вәйсилов ике көйҙөң («Арғужа» һәм «Шәрәфетдин») авторы булып сыға.


05-2001.p65 145 30.07.01, 9:43



(А…) Йылға ғына буйлап
(е)йөрөгәндә,
(Е) Бер(е) таш(ы) табып ал(ы)дым
беләүгә(ү).
Күргән нужаларҙы һөйләр инем
Үҙем кеүек ярһыу берәүгә.
Ялан ғына ерҙә, һай, сул ҡурай.
Башҡайында һайрай буҙ турғай.
Дошмандар шул мине һөйләй, буғай,
Башҡынаһы ҡайтмаç, ти, буғай.

## «Икенсе Ҡолой» йәки «Ҡолой менән Фатима»

Информатор һөйләүенсә, Мөхәммәтҡолой Кучуковтың иң йәш һәм иң яратҡан ҡатыны Фатима булған, ул бик шәп йырлаған. Улар Мейәс буйына сығып йырлашып йөрөр булғандар. Былдай йырлашыуҙың стилен музыка белгестәре ариозо стиле[7] тип атайҙар.



Ҡолой:

Э…й! Быйыл ғына (и) йыйған(ы)
кәбәнем(е)де
Яҙ кимәле(ү) етмәйҙә(ү) башламам.
Э…й! Шул матур ҡыҙҙы
һөймәйенсә,
Был егетлегемде ташламам.
Э…й! Шул ҡыҙ бала менән мин
уйнаным,
Йылға эстәренән таш алып.

Фатима:

Э…й! Оҙатып та сығып ҡарап
ҡалдым,
Ике күҙкәйемдән йәш ағып.

Ҡолой:

Э…й! Ҡаралды ла һалдым,
әй, ҡалҡыуға,
Уяҙ ғына ерем ҡалдырып.

Фатима:

Оҙатып та сығып ҡарап ҡалдым.
Ҡарағаттай күҙем талдырып.

## «Ишбирҙе»

Йырҙың тарихы буйынса, Ҡәҙер ауылы кешеһе Ишбирҙе батша армияһында хеҙмәт итеүҙән баш тартып, урманда ҡасып йөрөгән. Шул ваҡытта үҙенең яҙмышы тураһында йыр сығарған. Йырҙың үҙенсәлеге шунда — ул төркмән көйҙәренә хас. Уның аҙағы өҙләүгә оҡшаш. Өҙләүҙе Арғаяш башҡорттары борон «ҡайҙау» тип йөрөткән.





05-2001.p65 146 30.07.01, 9:43

(Эй…) Мейәс кенә(ү) буйы(ү), әй,
ҡыҙыл(ы) яр(ы),
Ҡөҙрәт кенә(и) менән(е) ҡаҙылған.
Минең генә(ү)
былай булыуҡайым(ы),
Мөҡәддәрҙә(и)[8] шулай(ы) яҙылған.
Мейәс кенә буйы, әй, һары тал,
Юнып ҡына ҡуйған уҡ кеүек.
Һин белмәйһең, дуҫым, хәлгенәмде,
Эскенәйем яна ут кеүек.

### «Заһиҙулла»[9]

Йырҙың легендаһы буйынса, Ҡоншаҡ яғы егете Заһиҙулла үҙенең Арғаяш төбәге дуҫы Ямантай менән социаль ғәҙелһеҙлеккә һәм батша хөкүмәтенең башҡорттарҙы иҙеү сәйәсәтенә ҡаршы көрәшеп маташҡандар. Улар батша чиновниктары һәм ярамһаҡланған мосолман байҙарының аттарын ҡыуып алып китеү менән шөғөлләнгәндәр. Арғаяш яғынан ат өйөрҙәрен Ямантай алып китеп Ҡоншаҡ яҡтарында ярлыларға өләшһә, Ҡоншаҡ яҡтарынан аттарҙы Заһиҙулла ҡыуып алып китер булған.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, быларҙы тоталар һәм Силәбе төрмәһенә ябып ҡуялар. Шул ваҡытта улар икәүләп камерала йырлашып ултырғандар һәм хатта йыр аша фекер алышҡандар. Шуның өсөн «Заһиҙулла» йырының ҡайһы бер варианттары диалог формаһында йәшәй.

Заһиҙулла:
Һәй! Атҡынамды төшөп(е) мин(е)
бәйләнем(е)
Аухай[10] ғына тигән дә сауылға.



Татлы ғына йоҡомдан уяна килдем
Заһиҙулла тигән дә тауышҡа.
Атҡынамды мин тышап ҡуйҙым
Аухай ғына буйы ла ҡамышҡа.
Башҡынамды тотоп мин иланым,
Һуҡранып та ғына шул яҙмышҡа.

Ямантай:

Һикереп кенә төштөм гөл баҡсаға,
Гөл-мамыҡҡайҙарға буялдым.
Ни күреркәй икән был ғәзиз баш —
Йоҡоларымдан илап та уяндым.
Көмөш тә генә эйәр, турсанай ат
Баҫып менәр ере лә еҙ генә.
Ғәзиз башың «под суд» булһа,
Ғәйеп кенә булыу ҙа тиҙ генә.

### «Сәйфелмөлөк»[11]

Йырҙың тарихында, Сәйфелмөлөк исемле егеттең дуҫы Сәитхужа менән социаль протест белдереп, чиновниктар һәм власть яҡлы байҙарға ҡаршы көрәшеп йөрөүҙәре, төрмәлә ултырыуҙары тураһында һөйләнә. Ваҡиғалар Силәбе өлкәһенең Красноармейский районы Тәүкәй ауылы менән бәйле булырға тейеш, сөнки текста Ҡуйһаҙан тигән исем осрай. Ҡуйһаҙан (Ҡуяҙан) — Тәүкәй ауылының боронғо исеме. Йырҙың һүҙҙәре тулыһынса һаҡланмауы сәбәпле, уның ҡайһы бер куплеттарын ғына бирәбеҙ.





05-2001.p65 147 30.07.01, 9:43

Илегеҙ(е) йәм(е)һеҙ, һыуығыҙ(ы)
тәм(е)һеҙ,
Ҡуйһаҙанҡай кеүек ер ҡайҙа? (2 ҡ.)

Ике генә телдә хаттар яҙа,
Сәйетхужа тигән ир ҡайҙа? (2 ҡ.)

Тел яҙмайыҡ, тиеп һин әйтәһең,
Беҙ икәүкәй өсөн дә кем китһен? (2 ҡ.)

### *«Ҡушай»*[12]

Шәйхисламов Кирам ағайҙың һөйләүе буйынса, йырҙың авторы 20-30-сы йылдарҙа Башҡортостандың Үҙәк Башҡарма комитеты (БашЦИК) рәйесе булған Хафиз Ҡушаевтың атаһы Ҡушай. Был йырҙа башҡорт халҡының XIX быуаттағы аяныс яҙмышының күренештәре сағылып ҡалған. Сөнки башҡорт ерҙәрен оятһыҙ



рәүештә талау арҡаһында халыҡ хәйерселеккә дусар ителгән. Бигерәк тә малсылыҡ даирәһен кәметеү башҡорттарҙың бәкәленә һуға.

Ҡайҙа ғына күҙҙән һин юғалдың,
Шырҡыратып ҡолон бәйләүҙәр.
Рәхәт кенә йәшәп, ҡымыҙ эсеп,
Жәй айында жәйрәп жәйҙәүҙәр.

Атҡа ғына менеп, юртып елеп,
Менгән саҡтар тауҙың башына.
Ҡәһәр генә һуҡһын был донъяны,
Кемдер етте жәйҙәү башына.[13]

### *«Ҡомкүл»*[14]

Йырҙың легендаһы буйынса, унын авторы — Садиҡ исемле, Салауат Юлаевтың көрәштәше. Ул Ҡомкүл буйында ҡасып йөрөгән. Йырҙы төрмәлә ултырған ваҡытта сығарған.



Беҙҙең генә Ҡомкүл уртаһында
Ҡаҙ бәпкәһе микән ҡағынған?
Ғәйнисафа менән Бәҙрисафа,[15]
Һағыналар микән мине уйлап?

Беҙҙең генә Ҡомкүл тәрән икән,
Буй һалһам да буйым буйҙамай.
Баш китерҙәй эштәр эштәбейҙем,[16]
Аҡылыма һалып уйҙамай.

### *«Ҡушкүл»*[17]

Арғаяш районы Мәтәл ауылында йәшәүсе Сафаров Шамил бабай был көйҙө үҙенең ҡартатаһынан өйрәнгән.





05-2001.p65 148 30.07.01, 9:43

Аҡкайҙарға менеп әкрен генә,
Йөрөһәң ине Урал буйҙатып,
Күрәгәләр алып, дуҫ-иш менән
Ултырһаң ине ҡурай уйнатып.
Йыраусылар, йырлашайыҡ,
Яңғыратып Ҡушкүлдең буйын.
Һөйҙәгән дошмандар һөйҙәһен,
Беҙ ултырайыҡ төн буйы.

### «Сел ҡурай»[18]

Был йырҙы Ғиләзев Кинжәбай ағай ҡурайҙа уйнап та, йырлап та башҡарҙы.




Ялан ғына(й) ерҙә, әй, сел ҡурай
Башҡайында һайрай ҙа(й) буҙ
турғай. (2 ҡ.)

Беҙҙе дошман һөйләй, бугай,
Башҡайҙары ҡайтмаҫ, тей, бугай.
Үҙ башына килмәҫ, тей бугай.

Аҡ ҡарсыға кеүек түшен киреп,
Ҡыҙҙар бара һыуға ҡойоға. (2 ҡ.)
Йәш башың, егет, нужа күрһә,
Арыҫлан кеүек ирҙәр бөгөлә. (2 ҡ.)

### «Мейәс буйы»

Был көй Арғаяш районында ике исем менән йөрөй, икенсе исеме — «Әминә». Яхъя ағай Хәмзиндең һөйләүе буйынса, был көйҙө ул үҙе сығарған.

«20-се йылдарҙа, — тип һөйләй Яхъя ағай, — Ҡолой ауылына Учалы яҡтарынан бер йәш кенә Әминә исемле ҡыҙҙы уҡытыусы итеп ебәрәләр. Ул мәктәптә балалар уҡыта башлай. Әминәне ауылдың байы Солтанға икенсе ҡатынлыҡҡа кейәүгә бирәләр. Солтандың оло ҡатыны уны яратмай һәм Әминәгә ҡаршы төрлө этлектәр ҡылырға эҙләп кенә тора». Йәш егет Яхъя ағай йәш киленсәккә ғашиҡ булып йөрөй. Ул Әминәне көн һайын иртә менән һыуға барған юлда йыш ҡына ҡаршы сығып, артынан ҡарап ҡалыр булған, ләкин үҙенең хистәрен әйтмәгән. Бер ваҡыт Әминә ғәйеп булған. Эҙләйҙәр-эҙләйҙәр, таба алмайҙар. Күп тә үтмәй, Яхъя ағай Мейәс буйлап йөрөгәндә Әминәнең мәйетенә тап була. Ул бер соҡор эсендә өҫтөнә төрлө ағастар өйөлгән көйө ятҡан була. Шунан уны ауылға алып ҡайтып ерләйҙәр. Егет кеше бик ныҡ ҡайғыра һәм Әминәгә арнап «Әминә» тигән йыр сығара. Ләкин был турала белеп ҡалған Солтан Яхъя ағайҙы ҡурҡытырға тырышып, унан йырҙың исемен үҙгәртеүен талап итә. Был ваҡытта йыр «Әминә» исеме менән халыҡ араһында таралып өлгөрә. Шул уҡ ваҡытта уны «Мейәс буйы» тигән исем менән дә йөрөтәләр.



Мейәс тә(й) буйы, әй, суҡ
муйылы(ы),
(Ы)Муйылын йыйып(ы) булмай
ел көндө.
Ғәжәп кенә үткән ғүмер һис
белгертмәй,
Үтеп кенә китер бер көндө.

Мейәс кенә буйы ҡыҙырым
ҡырсын,
Ҡыҙырым ҡырсын буйлап шул
йүгерҙем.
Үткән генә ғүмерем иҫемә төштө,
Башҡынамды һелкеп шул йүгерҙем.
Арҡанан үтә, арҡанан түтә
Арҡаларҙан йөрөүгә ни етә.
Егет кенә кеше ниәт итә,
Ниәтенә етә алмай ғүмер үтә.



05-2001.p65 149 30.07.01, 9:43

### *«Арғаяш Зәһиҙәһе»*

Был бейеү көйө беренсе тапҡыр «Совет Башҡортостаны» гәзитендә баҫылды.[19]



### *«Арғаяш башҡорттары бейеүе»*

Был бейеү көйө Сәфәрғәли Солтанбәковтың ҡурайҙа башҡарыуы буйынса бирелә.



### *«Мөхтәрәмә әбей бейеүе»*

Был бейеү көйөнөң башҡарылышы бик үҙенсәлекле. Мөхтәрәмә әбей ирендәре менән ҡумыҙҙа уйнауҙы имитациялап, ҡумыҙ тауышына оҡшатып көйләп, бейеүҙе башҡара.




### *Легендаларҙа йәшәгән тарих[20]*

Легендалар (риүәйәттәр), фольклорҙың башҡа төрҙәре һымаҡ уҡ, тарихты аңлап-белеүҙә мөһим урын алып тора. Уларҙың әһәмиәте бигерәк тә яҙма һәм археологик сығанаҡтар булмаған саҡта яҡшы күренә. Ләкин сығанаҡтар булған хәлдә лә легендаларҙың әһәмиәте һәм баһаһы бер нисек тә кәмемәй. Улар тарихи ваҡиғаларҙы һәм факттарҙы йәнләндереп ебәрә, үткәндәрҙе кешеләр араһындағы психологик бәйләнештәр аша кәүҙәләндерә.

Беҙ уҡыусыларыбыҙ иғтибарына Силәбе өлкәһе Арғаяш районының өс аҡһаҡалынан яҙып алынған өс тарихи легенда тәҡдим итәбеҙ.

### *Мейәс буйы ауылдарының килеп сығыуы*

Бик боронғо заманда Учалы яҡтарында урынлашҡан Науруҙ ауылында Тәңребирҙе тигән ҡарт оло улына сит ауылдан килен әйттерә. Килен кешенең исеме Аҡһылыу була. Ул үҙе менән бик күп мал эйәртеп алып килә. Оҙаҡ та тормай, Тәңребирҙенең оло улы ауырып үлеп китә. Аҡһылыу тол ҡала. Бер аҙ ваҡыт үткәс, ауыл егеттәре Аҡһылыуға димселәр ебәрә башлай, әммә Аҡһылыу берәүҙе лә яҡын



05-2001.p65 150 30.07.01, 9:43

күрмәй, барыһын да кире ҡаға. Ауыл халҡына был оҡшап етмәй. Йәш ҡатынға көн күрһәтмәй башлайҙар. Аптырағас, Аҡһылыу ҡыштың бер көнөндә аяғына саңғы кейеп, Мейәс буйлап ер ҡарарға сығып китә. Ул бик оҙаҡ йөрөй торғас, иҫ китәрлек урманлы тауҙар араһында ятҡан мөһабәт күл буйына килеп сыға. Был тирәлә бер нindәй торлаҡ та, кеше лә күренмәй, ә ҡош-ҡорт йыш осрай. Аҡһылыу бер һунарсыны осрата. Уның әйтеүе буйынса, был күл Арғужа исемле булып сыға. Был яҡта сырҙы һәм һыҙғы башҡорттары йәшәй икән. Һунарсы Аҡһылыуҙы үҙе йәшәгән төйәккә алып ҡайтып ҡунаҡ итә, үҙенең ауылдаштары менән таныштыра. Аҡһылыу был яҡ халҡының үҙҙәре бер төрлөрәк һөйләшеүҙәренә иҫе китеп йөрөй. Былар «һеҙ» тигәнде «һеҫ» тип, «һеҙҙеке» — «һеҫтеке», «беҙҙеке» — «беҫтеке», «ҡыҙҙар» тигәнде «ҡыҫтар» тип һөйләшәләр икән.

Аҡһылыуға был яҡтың халҡы ла, ере лә оҡшай һәм ул бында күсеп килергә була. Ул ҡайныһы менән ҡәйнәһе янына ҡайтып, үҙ теләген белдерә. Ҡарттар киленен ебәрергә теләмәһәләр ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәйҙәр, риза булалар. Йәй еткәс, улар килендәренә тейешле малды бүлеп биреп, Мейәс, Арғужа буйҙарына оҙаталар. Малдарҙы көтөүселәр ҡыуып алып киткәс, Аҡһылыу ҡайныһы һәм ҡәйнәһе менән бик йылы хушлаша. Бында Тәңребирҙе ҡарттың Дәүләтша тигән 6 йәшлек улы ла була. Аҡһылыу ҡайныһына: «Ҡайным, Дәүләтшаны бер һөйөп алайым, алдыма күтәреп ултыртығыҙ әле», — ти. Ҡарт Дәүләтшаны атта һыбай ултырған еңгәһенең алдына күтәреп ултыртыуы була, Аҡһылыу аттың теҙгенен тарта ла ҡамсы менән һуғып ебәрә. Толпар ҡойон уйнатып сабып сығып китә. Шулай итеп, Дәүләтшаны еңгәһе алып ҡаса.

Аҡһылыу үҙенең мал-тыуары һәм көтөүселәре менән хәҙерге Ялтыр ауылы урынына килеп урынлаша. Дәүләтша егет булып еткәс еңгәһенә өйләнә. Улар бер-береһенә риза булып, бик мөхәббәтле итеп йәшәй башлайҙар. Күп йылдар үтә. Аҡһылыу менән Дәүләтшаның ете улы тыуа. Уларҙың исемдәре: Шаим, Ҡужамғол, Бикҡол, Мәүлит, Сәләй, Хәлит, Яратҡул. Ошо егеттәр өйләнешеп, һәр береһе бер ауылды башлап ебәрә. Ҡайһы бер ауылдар әлегә тиклем ошо егеттәрҙең йә булмаһа уларҙың улдарының исемдәрен йөрөтә. Бөгөнгө көнгәсә Арғаяш районында Яратҡул, Сәләй, Хәлит, Мәүлит исемле ауылдар бар.

## *Таймаҫ Шаимов нисек тархан булған*

Дәүләтша менән Аҡһылыуҙың улы Шаим бик иртә донъя ҡуя. Уның Таймаҫ тигән ете йәшлек улы ҡала. Етем ҡалған бала ҡайҙа етте шунда тамаҡ туйҙырып, бик интегеп егет булып үҫеп етә. Ул Байрамғол ауылында бик бай һәм шул яҡта дан тотҡан Ҡәүем тигән кешелә бер нисә йыл ат ҡараусы булып йөрөй. Таймаҫ үҙенең көслө һәм сапсан, осҡор һәм етеҙ тәбиғәтле булыуы менән Ҡәүемгә оҡшай. Ҡәүем уны үҙенә яҡынлаштыра һәм яуға сыҡҡанда гел эргәһендә йөрөтә. Таймаҫ Ҡәүемдән аяуһыҙ булырға, ябай кешене һанға һуҡмаҫҡа, үҙ мәнфәғәтен һәр ваҡыт беренсе урынға ҡуйырға өйрәнә һәм быларҙы тормош закондары итеп һанай. Ҡәүем быларҙы Таймаҫҡа өйрәтеүен өйрәтә лә, ләкин бер нәмәне абайламай ҡала — уҡыусыһы уның башына етә.

Бер ваҡыт Ҡәүем Өфөгә провинция башлығының саҡыртыуы буйынса килә. Ул үҙе менән Таймаҫты ла алып китә. Ни өсөн тиһәң, Таймаҫ бик зирәк була, йыш ҡына Ҡәүемгә файҙалы кәңәштәр ҙә биргеләй. Шуның өсөн Ҡәүем юлда барғанда Таймаҫты өйрәтеп ҡуя: «Әгәр һинән, кемһең, тип һораһалар, Ҡәүемдең улы, тип әйт». Өфөлә Ҡәүем провинция начальствоһы менән ҡунаҡ булышалар. Ул байтаҡ ҡына бүләк тә алып килә (ҡама, һыуһар һ.б. йәнлек тиреләре). Өфөләге провинция башлыҡтары быны ныҡ итеп һыйлай. Араҡы эсеп өйрәнмәһә лә, Ҡәүем сер бирмәҫкә тырыша, дворяндар менән бер рәттән эсә, ләкин тиҙ иҫереп китә һәм Таймаҫ уны ҡунаҡ йортона алып бара. Улар был йорттоң икенсе ҡатында урынлашҡан булалар. Ҡәүем ҡоҫа башлай һәм һауа алыштырыр өсөн балконға сыға. Таймаҫ ошоно ғына көтөп торғандай, арттан килеп Ҡәүемде аяҡтарынан тотоп, баш түбән аҫҡа төшөрөп ебәрә. Ҡәүем башы ярылып шунда уҡ мәнсух була[21]. Иртәгеһенә бергә эскән чиновниктар килеп, Таймаҫтың «атаһы» үлеүе сәбәпле ҡайғыһын уртаҡлашалар, ә Ҡәүемдең мөлкәтен һәм ерен Таймаҫ Шаимовтың исеменә яҙалар. Шулай итеп, Таймаҫ Шаимов припущенниктан вотчинникка әүерелә. Ошоноң артҡаһында ул һуңыраҡ батшабикә Анна Ивановна фарманы буйынса тархан исемен ала.

«Һырмаға менгәс»[22], Таймаҫ үҙенең интеккәндәрен онота һәм халыҡты иҙә



05-2001.p65 151 30.07.01, 9:43

башлай, батшалыҡтың тоғро ялсыһына әүерелә. 1735-1740 йылдарҙа ихтилал-күтәрелеш ваҡытында халыҡты ҡырыуҙа ҡатнаша. Шуның өсөн уны халыҡ үлемгә хөкөм итә, ләкин ҡарар осраҡлы рәүештә тормошҡа ашырылмай ҡала. Көтмәгәндә килеп сыҡҡан хәл быға ҡамасаулай. Халыҡ хөкөмөн сырҙы башҡорттары башҡарырға тейеш була. Улар Таймаҫтан кәңәш һораған булып, ҡунаҡҡа саҡыралар. Таймаҫ сырҙыларҙың ауылына килә, уның эргәһендә һынсыһы[23] ла була. Килеүе була, уны өйгә бикләп тә ҡуялар. Өй эсендә аш-һыу әҙерләп бер йәш киленсәк йөрөй. Уның менән бергә бәләкәй имсәк бала ла була. Аҡһаҡалдар Таймаҫ Шаимовты эшләгән вәхшилектәре өсөн уны өй менән бергә яндырып үлтерергә ҡарар сығаралар. Таймаҫ быны һиҙеп ҡалып, балалы йәш ҡатынды өйҙән сығармай һәм ишекте эстән элеп өлгөрә. Ығы-зығы китә, ә был арала һынсы ат менеп сабып сығып китә. Артынан ҡыуып ҡарайҙар, ләкин тота алмайҙар. Күп тә ваҡыт үтмәй, һынсы Таймаҫтың ҡоралды ярандарын алып килә һәм уны ҡотҡара. Шулай итеп тархан Таймаҫ Шаимов халыҡ язаһынан ҡотолоп ҡала.

Таймаҫ тархан тураһында легендалағы мәғлүмәттәргә фәнни һәм архив сығанаҡтарынан сығып, бәләкәй генә тарихи өҫтәмә биреп китәйек. Был материалдар Таймаҫ Шаимовтың ни тиклем ҡаршылыҡлы шәхес булыуын һүрәтләй.

1731 йылда Таймаҫ Шаимов Алдар Иҫәнгилдин һәм башҡалар менән бергә Рәсәй илселеге составында Ҡаҙағстандың (иң тәүҙә Кесе Йөҙҙөң[24]) үҙ теләге менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуына булышлыҡ итә.

XIX быуатта Ҡаҙағстанды өйрәнгән ғалим А.Левшиндың яҙыуы буйынса, был эштең ыңғай йүнәлеш алыуына ҡаҙаҡтар араһында үҙенең батырлыҡтары менән билдәле булған Таймаҫ батырҙың роле ҙур була[25]. Ошо йүнәлешкә тотҡарлыҡ яһарға тырышып, Урта Йөҙҙөң ханы Шемәкә ике мәртәбә Башҡортостанға яу менән килә, ләкин икеһендә лә Таймаҫтың ғәскәре тарафынан аяуһыҙ тар-мар ителә. Был турала беҙ Рәсәй императрицаһы Анна Ивановнаның 1734 йылдың 10 июнендә Шемәкә ханға яҙған хатынан белә алабыҙ.

Мәҡәләне дөйөмләштереп шуны әйтеп була: фольклор сығанаҡтарынан, шул иҫәптән легендаларҙан, байтаҡ ҡыҙыҡлы тарихи мәғлүмәттәр таба алабыҙ. Уларҙың ҡайһы берҙәре үҙҙәренең тарихи ысынбарлыҡҡа яҡын булыуы менән билдәләнһә, икенселәрендә уйҙырмалар ҙа булыуы ихтимал. Шуның өсөн был сығанаҡтарға баһа биргән саҡта уларға тарихилыҡ күҙлеге аша ҡарау мотлаҡ. Был тарихи ваҡиғаны конкрет рәүештә күрергә һәм тыуған илдең үткәнен дөрөҫ аңларға ярҙам итә.

## *Кучуковтар фамилияһы тарихы*[26]

Был тарих бик боронғо ваҡиғаларҙы күҙ алдына баҫтыра. Учалы яҡтарында (ҡайһы ауылда икәнлеге хәтерҙә ҡалмаған) бер ғаилә йәшәгән. Иренең исеме Ҡаракеше булған, ул барымтаға барған саҡта урлап алып ҡайтҡан ҡалмыҡ ҡыҙын 4-се ҡатынлыҡҡа ала. Уларҙың ике улы тыуа: Амангилде менән Иҫәнгилде. Былар үҫеп еткәс, Ҡаракеше уларға үлер саҡта васыят әйтә: «Был яҡта ер тарайҙы, уландарҙың береһе бынан күсеп киткен», — ти. Ә ҡайҙа барып урынлашырға? Йола буйынса, бейә бәйләгән саҡта ҡолондарҙы бәйләп ҡуйған арҡандың бер осон сисеп ысҡындырып ебәрәләр. Ҡолондар йүгереп сығып китәләр, ә бейәләр улар артынан китә. Ҡолондар туҡтаған ерҙә кешеләр ҙә туҡтарға тейеш булған[27]. Шулай эшләйҙәр ҙә. Ә ҡолондар Мейәс йылғаһы буйында туҡтайҙар. Шулай итеп ауыл барлыҡҡа килә. Был ауылға Иҫәнгилде тигән исем ҡушалар. Ә Амангилде тороп ҡалған урында Амангилде ауылы барлыҡҡа килә. Иҫәнгилде ауылы хәҙер ҙә бар, тик һуңыраҡ, XIX быуаттан алып, был ауылды Сәғит атамаһы менән йөрөтә башлайҙар, сөнки ошо ауылда тыуған кантон начальнигының исеме Сәғит була (Ҡолой кантондың оло улы).

Ошо нәҫел тарихта билдәле булған 5-се кантон начальнигы Мөхәммәтҡолой Кучуковтың нәҫеле.

Тайфур ағай Кучуковтан яҙып алған шәжәрәне тәҡдим итәбеҙ.

Ҡаракеше → Иҫәнгилде → Туғыҙаҡ → Йортомбай → Ишмөхәмәт → Йәрмөхәмәт → Мөхәммәтҡолой → Сәғит → Сәйфелмөлөк → Мөхәмәтшәриф (1838-1914) → Фәтих (1874-1961) → Тайфур (1911).

Был шәхестәр хаҡында ҡайһы бер мәғлүмәттәр һаҡланған. Йәрмөхәмәт батша армияһында хеҙмәт итеп, сотник дәрәжәһенә күтәрелгән. Мөхәм-



05-2001.p65 152 30.07.01, 9:43

мәтҡолой Кучуков (Йәрмөхәмәттең улы) белемле кеше булған. 1798 йылдан 1824 йылға тиклем 5-се кантон начальнигы булып торған, урыҫ ғәскәрҙәре менән бергә үҙ отряды башында Парижға ингән, хәрби дәрәжәһе — «кантонный начальник 14-го класса». Тыуған йылы — 1763. 1811 йылда 48 йәшендә өс ҡатын менән йәшәгән, 5 улы булған. Беренсе Ватан һуғышында ҡатнашҡаны өсөн уға «Почетный потомственный дворянин Российской империи» тигән исем бирелгән. Ҡолойҙоң улы Сәғит тә «кантонный начальник» булған.

Кучуков фамилияһының килеп сығыуы бер ни тиклем легендаға оҡшаған. Йәрмөхәмәттең атаһы Ишмөхәмәттең балалары булмай. Бер ваҡыт, көҙ көнө кис быларға бер мосафир килеп керә. Ишмөхәмәт ҡарт ҡайғыһын һөйләп бирә. Мосафир уға бер доғалыҡ тоттора: «Тиҙҙән балағыҙ тыуыр», — ти. Баланы, тыуыу менән, яңы донъяға килгән көсөктәр араһына һалып ҡуйырға ҡуша. Бала ысынлап та донъяға килә, уны көсөктәр араһына һалып ҡуялар һәм Көсөк тигән исем ҡушалар. Көсөк Армияға киткән саҡта былдай ваҡиға була. Уның исемен һорайҙар. Ул: «Көсөк», — тип яуап бирә. Писарь татар була, ул Көсөк урынына Кучук тип яҙып ҡуя. Шулай башланып китә Кучуковтар фамилияһы.

Икенсе риүәйәт буйынса, бер ваҡыт, башҡорттар ҡаҙаҡ далаһынан барымтанан ҡайтып килгәндә, ҡуйы үлән араһында имсәк бала табып алалар. Йола буйынса, баланы ғәскәр башлығына бирәләр. Ул баланы ҙур шатлыҡ менән ҡабул итә һәм уға Көсөк тигән исем ҡуштыра. Көсөктөң балалары Кучуков фамилияһы менән йөрөй башлай.

## ИҪКӘРМӘЛӘР

[1] Башҡорт халыҡ ижады: Йырҙар. — 1-се т. Өфө, 1974.

[2] Фольклор народов РСФСР. — Уфа, 1980.

[3] Дәл булдым — тап булдым.

[4] Йырҙың был юлы куплеттар аҙағында ҡушымта һымаҡ ҡабатлана.

[5] Маң булдым — мәжбүр булдым

[6] Төйә — борон Силәбе өлкәһе башҡорттары дөйәне шулай тип атағандар.

[7] Ариозо стиле — һөйләү ҡатыш йырлап башҡарыу.

[8] Мөҡәддәр (ғәрәп һ.) — яҙмыш, тәҡдир.

[9] «Фольклор народов РСФСР» йыйынтығында баҫылып сыҡты. (Өфө, БДУ, 1981).

[10] Аухай — күл буйында үҫкән ағас исеме.

[11] Фольклор народов РСФСР. — Уфа, БГУ, 1981.

[12] Фольклор народов РСФСР. — Уфа, БГУ, 1981.

[13] «Ҡушай» йыры үҙенең мотивтары буйынса, Фәтхелҡадир Сөләймәновтың (Төркиәләге псевдонимы Абдулҡадир Инан) «Йәйләүҙе һағынғанда» тигән шиғырына ауаздаш. Был шиғыр 1914 йылда «Мөғәллим» журналының 8-се һанында донъя күргән.

[14] Фольклор народов РСФСР. — Уфа, БГУ, 1984.

[15] Бәҙрисафа менән Ғәйнисафа — Садиҡтың ҡатындары.

[16] Эштәбейҙем — эшләп ебәрҙем.

[17] Ҡушкүл — Арғаяш районындағы күл.

[18] Сел ҡурай — дала ҡурайы.

[19] Вәлиев Д., Алкин М. Ҡурайсы Сәфәрғәли Солтанбәков. // Совет Башҡортостаны. — 1980, 5 октябрь.

[20] Был бүлектә баҫылған материалдарҙың бер өлөшө (Таймаҫ тархан тарихы һәм Мейәс буйындағы башҡорт ауылдары хаҡында) «Совет Башҡортостаны» гәзитендә 1984 йылдың 10 ноябрендә баҫылды.

[21] Мәнсух булыу — юҡ булыу, дөмөгөү.

[22] Һырмаға менеү — ауыр хәлдән сығыу, ауырлыҡты еңеү.

[23] Һынсы — ярҙамсы, кәңәшсе һ.б. Феодализм дәүерендә башҡорт бейҙәре һәм ғәскәр башлыҡтары, ғөмүмән юғары феодалдар ҡатламы вәкилдәре эргәһендә махсуслаштырылған һынсы вазифаһы булған.

[24] Ҡаҙағстан был дәүерҙә өс ханлыҡҡа бүленгән: Кесе Йөҙ, Урта Йөҙ һәм Оло Йөҙ. Кесе Йөҙ иң тәүгеләрҙән булып Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән XVIII быуаттың 30-сы йылдарында ҡушыла.

[25] Левшин А. Описание киргиз-кайсацких или киргиз-казачьих орд и степей. — Ч.III. — СПб., 1832. — с.99.

[26] Тайфур Фәтих улы Кучуков үҙ фамилияһы тарихын һөйләне.

Ул 1911 йылда Арғаяш районы Мөхәммәтҡолой (Ҡолой) ауылында тыуған. 20-30-сы йылдарҙа «Йәш юҡсыл» йәштәр гәзитенең баш мөхәррир урынбаҫары булып эшләй. Нахаҡҡа ғәйепләнеп, 10 йылдан артыҡ ГУЛАГ тормошоноң кәмһетеүҙәрен татый. 50-се йылдар аҙағында ғына Өфөгә ҡайтып йәшәргә рөхсәт ала. Хаҡлы ялға киткәнсе төрлө матбуғат органдарында журналист була. Бөгөнгө көндә Ҡырғыҙстандың башҡалаһы Бишкекта йәшәй.

[27] Был йоланың килеп сығыуы башҡорттарҙа йылҡы культы (атҡа табыныу) менән бәйле булырға тейеш. Мосолман дине ингәнгә тиклем башҡорттарҙа йылҡы культы ныҡ таралған булған. Был турала башҡорт халыҡ эпосында йылҡы малы хаҡында ҡобайырҙар ҙа әйтеп тора. Бында «Аҡбуҙат», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара ат» кеүек әҫәрҙәр күҙ уңында тотола.



05-2001.p65 153 30.07.01, 9:43

## ИНФОРМАТОРҘАР ҺӘМ КӨЙҘӘРҘЕ НОТАҒА ҺАЛЫУСЫЛАР

1. *Сукан батыр.* 1978 йылда Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Нуркин ауылында Сәфәрғәли Солтанбәковтан (1905-1985) яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М. Алкин.
2. *Киҙәгәс.* 1978 йылда Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Нуркин ауылында Сәфәрғәли Солтанбәковтан яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
3. *Ҡолой кантон* (вариант). 1978 йылда Арғаяш районы Нуркин ауылында Сәфәрғәли Солтанбәковтан яҙып алынды. Нотаға һалыусы М.Алкин.
4. *Сәйкә батыр.* 1978 йылда Нуркин ауылында Сәфәрғәли Солтанбәковтан яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
5. *Арғужа.* 1978 йылда Яңы Субыл ауылында Жәүәт Вәли улы Вәлиевтан яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
6. *Шәрәфетдин Вәйсилов йыры.* Яхъя Хәмзиндың (1905 й.) башҡарыуы буйынса Ҡолой ауылында яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
7. *«Икенсе Ҡолой» йәки «Ҡолой менән Фатима».* 1979 йылда Яхъя Хәмзиндән (1905 й.) яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
8. *Ишбирҙе.* Сығанағы шул уҡ.
9. *Заһиҙулла.* 1979 йылда Сәфәрғәли Солтанбәковтан яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
10. *Сәйфелмөлөк.* Сығанағы шул уҡ.
11. *Ҡушай.* 1982 йылда Арғаяш районы Үләнде ауылында Кирам Шәйхисламовтан яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
12. *Ҡомҡул.* 1982 йылда Үләнде ауылында Кирам Шәйхисламовтан яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
13. *Ҡушҡул.* 1982 йылда Арғаяш районы Мәтәл ауылында Шамил Сафаровтан (1905 й.) яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
14. *Сел ҡурай.* 1988 йылда Арғаяш районы Усман ауылында Кинжәбай Ғиләж улы Ғиләзевтән (1917-1995) яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы А.Ҡобағошов.
15. *Мейәс буйы.* 1978 йылда Арғаяш районы Ҡолой ауылында Яхъя Хәмзиндән яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
16. *Арғаяш Заһиҙәһе.* 1978 йылда Арғаяш районы Нуркин ауылында Сәфәрғәли Солтанбәковтан яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
17. *Арғаяш башкорттары бейеце.* 1978 йылда Сәфәрғәли Солтанбәковтан яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.
18. *Мөхтәрәмә әбей бейеце.* 1978 йылда Иҫке Субыл ауылында Мөхтәрәмә Сисәмбаеванан (1918 й.) яҙып алынды. Нотаға һалыусыһы М.Алкин.

## ЛЕГЕНДАЛАРҘА ЙӘШӘГӘН ТАРИХ

1. *Мейәс буйы ауылдарының килеп сығыуы.* Арғаяш районы Мәүлит ауылында уҡытыусы Тайфур Сөләймәновтан (1905-1983) 1978 йылда яҙып алынды.
2. *Таймаҫ Шаимов нисек тархан булған.* Арғаяш районы Мөхәммәтҡолой (Ҡолой) ауылында бик күп йыр һәм легендалар белеүсе Яхъя Хәмзиндән (1905 й.) 1984 йылда яҙып алынды.
3. *Кучуковтар фамилияһы тарихы.* Арғаяш районы Мөхәммәтҡолой (Ҡолой) ауылында Тайфур Фәтих улы Кучуковтан (1911 й.) 1974 йылда яҙып алынды.



05-2001.p65 154 30.07.01, 9:43